*Миңниса БАҺУМАНОВА*

# АТАМ-ӘСӘМ ТЕЛЕ — ИЛЕМ ТЕЛЕ

"Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" конкурсы республикала ун ике тапҡыр үткәрелеп, хәҙер традицион төҫ алып бара. Уҡытыусы һөнәренең абруйын күтәреү — сараның төп маҡсаты, шунлыҡтан бәйгегә, дөйөм белем биреү учреждениеларынан тыш, колледж, лицей, педагогия һәм һөнәрселек училищелары уҡытыусылары ла саҡырылды. Конкурста улар-



*Башҡортостан Республикаһы Президенты М.F.Рәхимов, БР Мәғариф министры F.М.Мөхәмәтйәнова «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса йыл уҡытыусыһы — 2002» конкурсы еңеүселәре менән*

ҙың шәхси һәм эш сифаттары, профессионализмы, педагогик мәҙәниәте, яңыса эшләү һәләте, әхлаҡи йөҙө, граждандыҡ позициялары баһаланды. Өс турҙан торған һынауҙы үтеп, быйыл "Башҡортостандың йыл уҡытыу-

сыһы" тигән маҡтаулы исемгә Сибай ҡалаһынан музыка уҡытыусыһы Зөлфиә Сабирйән ҡыҙы Әбйәлилова лайыҡ булды.

"Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса йыл уҡытыусыһы" республика конкурсы әле етенсе тапҡыр ғына үткәрелә. Быйылғыһында Силәбе, Ырымбур, Һамар өлкәләре уҡытыусылары ҡатнашҡанлыҡтан, ул төбәк-ара бәйгегә әүерелеп китте. Ошо яғы менән ул быға саҡлы үткәрелгән конкурстарҙан айырылып тора һәм бик ҙур әһәмиәткә эйә.

"Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса йыл уҡытыусыһы" исеменә лайыҡ булған талантлы, ижади эш оҫталары: Ураҡсина Рәсимә Булат ҡыҙы (1991), Юлдашбаев Азамат Рәмил улы (1996), Сәләхова Зилә Иҙрис ҡыҙы (1997), Ғәлиева Ғәлимә Мансур ҡыҙы (1998), Урманшин Рәмис Мәғәфүр улы (1999), Ғиззәтуллина Гөлнур Барый ҡыҙы (2000), Сафиуллина Мәүлиә Фәрит ҡыҙы (2001) (Ҡара: «Ватандаш», 2002, 3-сө һан). Быйылғы ярышта Стәрлетамаҡ ҡалаһынан Әхмәтова Гөлшат Әүхәҙи ҡыҙы еңеп сыҡты.

Конкурста еңеүселәргә, уның лауреаттарына махсус премияларҙы республикабыҙ Президентының үҙ ҡулы менән тапшырыуы был сараның мәртәбәһен тағы ла күтәреп ебәрҙе.

Әйҙәгеҙ, еңеүселәрҙең бер нисәһе менән яҡындараҡ танышайыҡ.

**Ураҡсина Рәсимә Булат ҡыҙы**

Рәсимә 1950 йылда Дәүләкән районы Яңы Яппар ауылында ишле ғаиләлә ун беренсе бала булып донъяға килә. Атаһы Миңлебулат Тимербулат улы тәнендә һуғыш ярсығын йөрөтһә лә, тракторынан төшмәй, колхозда егелеп эшләй. Әсәһе Нәфисә апай ашнаҡсы була. Ата-әсәләренең тырышлығы, кешеләргә күрһәткән игелектәре, ихлас асыҡ йөҙҙәре, йылы һүҙгә маһирлыҡтары балаларына ла күсә. Рәсимә ауылдарында башланғыс мәктәпте тамамлағас та 1962 йылда Өфөләге 1-се интернат-мәктәпкә уҡырға инә. Артабан БДУ-ның филология факультетын тамамлай. «Шоңҡар» әҙәби түңәрәгенә йөрөп ярыша-ярыша шиғырҙар, мәҡәләләр яҙа, университеттың драма түңәрәгендә ҡатнаша. Янып, ҡолас йәйеп ташлана ул ижад донъяһына. Әҙәбиәттә лә, сәнғәттә лә берҙәй ал бирмәй. Уның башҡарыуындағы Айгөл (М.Кәрим. «Айгөл иле») бик күп талиптарҙың күңелен ихласлығы, тәбиғи инсафлығы, сая, шул уҡ ваҡытта аҡыллы, көслө рухлы булыуы, тормош бәхетен алдан тоя белгәнлеге менән әсир иткәйне. Күп яҡтан ул Рәсимәнең эске донъяһына тап килгәндәй.

Сибай педагогия училищеһында эшләгәндә лә Рәсимә үҙенең булмышына хыянат итмәне: ике бала үҫтерҙе, төбәк райондары буйлап йөрөп, халыҡ ижады гәүһәрҙәрен йыйҙы, өйрәнде, талиптарына өйрәтте, уларҙы балалар баҡсаларына, башланғыс мәктәптәргә практикаға йөрөттө, кескәй балалары Гөлназ менән Салауатҡа шиғырҙар яҙҙы.

Профессор Кирәй Мәргән тәҡдим иткән «Башҡорт балалар фольклоры» темаһы буйынса ғилми хеҙмәтен йомғаҡлап өлгөрмәй, бәхетһеҙлек ишек ҡаға — етәксеһе мәрхүм була. Рәсимә бер аҙ баҙап ҡала. Университеттағы уҡытыусыһы Миҙхәт Фазлый улы Ғәйнуллин башҡорт балалар фольклорын әҙәбиәт менән бәйләп өйрәнергә тәҡдим итә. Рәсимә тырышып-тырмашып яңы теманы асыуға керешә: «Башҡорт балалар әҙәбиәте формалашыуҙа фольклорҙың роле» тип атала уның диссертацияһы. Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады гәүһәрҙәре күпләп һаҡланған Урал аръяғына — Сибай ҡалаһына, тормош иптәше, архитектор Урал Ғәзиз улы менән эшкә китә.

— Сибай педагогия училищеһы минең эшмышымда мөһим роль уйнаны, — тип иҫәпләй Рәсимә Булат ҡыҙы. — Ун һигеҙ йыл эшләү осоронда үткәрелгән кисәләрҙең иҫәбен үҙем дә белмәйем. Талиптарым менән балалар баҡсаһында башҡорт теле буйынса шефлыҡ иттек. Беҙҙең саҡырыу буйынса ҡалаға төркөм-төркөм яҙыусылар килеп төшә ине. Оҙаҡ йылдар ошо төбәктәге ижади йәштәр өсөн махсус төҙөлгән «Ирәндек» әҙәби берекмәһе рәйесе урынбаҫары ла булдым. Мәктәптәрҙә, пионер лагерҙарында, төрлө мәҙәни кисәләрҙә сығыш яһау, туҡтауһыҙ халыҡ менән аралашыу мине шәхес итеп үҫтерҙе.

Рәсимә Булат ҡыҙы талиптары менән ҡайҙарға ғына аяҡ баҫманы икән ул саҡтарҙа. Сибай педагогия училищеһы бик ҙур төбәктә уҡытыусылар әҙерләүсе берҙән-бер белем усағы булғанлыҡтан, әҙәби кисәләрҙән, сағыу асыҡ дәрестәрҙән, төрлө-төрлө мәҙәни сараларҙан гөрләп торҙо. Юғары талапсанлыҡ уҡытыусыларҙы туҡтауһыҙ эҙләнергә мәжбүр итә. Рәсимә курс эштәрен, дипломдарҙы яҙҙырыр өсөн үҙенең талиптарын Өфөгә, Зәки Вәлиди исемендәге Милли китапханаға алып китте. Юғары профессиональ белгестәр әҙерләүгә бөтә көсөн һалды. Үҙенә лә, уҡыусыларына ла маҡсатты ҙур ҡуйҙы. Милли китапхана планына ярашлы кисәләрҙә актив ҡатнашып, Сибайға өр-яңы дәрт, илһам менән әйләнеп ҡайтты.

1990 йылда уҡытыусылар бәйгеләре ойошторола башлағас та, бер йыл әҙерләнгәндән һуң, Рәсимә Башҡортостан буйынса финалға сыға һәм Бөтә Рәсәй конкурсында ҡатнашыу хоҡуғы ала. Өфөлә бөйөк батырыбыҙ Салауат Юлаевҡа арналған асыҡ дәрес уға еңеү килтерһә, Мәскәүҙә инде ул Рәсәй уҡытыусыларын тотош башҡорт әҙәбиәте менән таныштыра. Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығы уны ике Маҡтау ҡағыҙы менән бүләкләй. 1991 йылда Рәсимә Одесса ҡалаһында үткәрелгән «СССР-ҙың ижади уҡытыусылары» съезында ҡатнашып, үҙенең ижад лабораторияһы хаҡында сығыш яһай. Ошо уҡ йылды Рәсимәгә «СССР-ҙың мәғариф алдынғыһы» значогы, «Башҡортостан мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы» тигән маҡтаулы исем бирелә. Артабан «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналы редакцияһының баш мөхәррире С.Я.Ғүмәров етәкселегендәге төркөм менән Башҡортостан мәктәптәре буйлап командировкаларға сыға һәм үҙенең методик эш алымдары менән ихлас уртаҡлаша. Төркөм планына тап килгән темаларға ярашлы дежур дәрестәр бирә. 1994 йылда Рәсимә Булат ҡыҙы Улан-Удэ ҡалаһында үткәрелгән ижади уҡытыусыларҙың халыҡ-ара конференцияһында Башҡортостан делегацияһы составында ҡатнаша. Бурят милли гимназияһында Салауат Юлаев образының әҙәбиәттә сағылышы хаҡында асыҡ дәрес бирә.

Ижади эш, төрлө кимәлдәге бәйгеләр һөҙөмтәһендә Башҡортостандың башҡа мәктәптәренә өлгө күрһәтерлек уҡытыусы башҡалаға, Р.Ғарипов исемендәге гимназияға эшкә саҡырыла. Бында уның уҡыусылары ҡатнашлығында Башҡортостан телерадиокомпанияһының «Ижад» берекмәһе телевизион дәрестәр ойоштора: «Әҙәбиәттә ҡатын-ҡыҙҙарҙың милли һыҙаттары», «Әҙәбиәттә башҡорт егеттәренең милли холоҡ-фиғеле», «Салауат — беҙҙең рухи юлбашсыбыҙ», «Киләсәккә өмөт ҡалдыр әле» (эскелеккә, наркоманияға ҡаршы) һ.б.

1995 йылдан алып Рәсимә Булат ҡыҙы БДПУ-ның психология һәм педагогика факультетында башҡорт һәм рус балалар әҙәбиәте, телмәрҙе үҫтереү методикаһы, тасуири уҡыу, башҡорт фольклоры буйынса лекциялар уҡыны, шул уҡ йылда БДУ-ла кандидатлыҡ диссертацияһы яҡланы. 1996 йылда Өфө ҡалаһының 2-се педагогия колледжында ғилми эштәр буйынса директор урынбаҫары вазифаһын үтәй башлай.

— Хәҙер мин Әхәт Вилданов етәкләгән башҡорт теле кафедра-

һында эшләйем, башҡорт балалар әҙәбиәтен уҡытам, ғүмер буйы ынтылған маҡсатым тормошҡа ашты. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләүем мине төрлө яҡлап үҫтерҙе, йәшәүгә дәрт бирҙе. Сибай ҡалаһының халыҡ театрында уйнауым иһә үҙемде һәр ҡайҙа ла тәбиғи, асыҡ тоторға өйрәтте, — ти Рәсимә. — Уҡыусыларым менән дә ғорурлана алам: һәр береһе эшләгән ерендә булдыҡлы, сәнғәт, әҙәбиәт донъяһына ынтылып торалар, рухи яҡтан байынылар, мәктәптәрендә тырышып эшләп йөрөйҙәр.

Рәсимә Булат ҡыҙы Ураҡсина үҙенең күп яҡлы таланты, бөтмөрлөгө менән таң ҡалдыра: үрҙә һаналған уңыштарҙы ул уҡытыусы булараҡ яулаһа, ошо тиклем ижади хеҙмәт араһында вазифаһы буйынса ла үҫте, ә яҙыусы, шағирә булараҡ, «Тәтәй ҡалаҡ баҙарҙа», «Тәмлетәмле тәмлекәс», «Йомро-йомро Ер шарым» китаптарын нәшер итеп өлгөрҙө, Сибайҙың «Сулпан» балалар театрында ике пьесаһын сәхнәләштерҙе, балалар фольклоры тураһында өс ҙур ғилми хеҙмәт йыйынтыҡтарын төҙөүҙә актив ҡатнашты. Бала саҡ иленән килгән иң саф тойғоларҙан ғына торған шиғри донъя, даръялай ҡайнап ижад ителгән хеҙмәт емеше бүләк итте ул беҙгә.

**Әбйәлилова Зөлфиә**
**Сабирйән ҡыҙы**

Зөлфиә әле бик йәш. Автобиографияһы ла бер-ике һөйләмдән генә тора: 1976 йылда Сибай ҡалаһында тыуған, ҡаланың 9-сы урта һәм музыка мәктәптәрен берҙәй тамамлағас, БДУ-ның Сибай институтында «Педагогика һәм башланғыс белем методикаһы менән музыка» факультетында белем алып, 10-сы мәктәптә, артабан гимназия-интернатта музыканан уҡыта.

Дәрестәрендә Әбйәлилова балаларҙы өйрәтеүсе, дәртләндереүсе, кәңәшсе, ярҙамсы һәм ҡурсалаусы ғына булып ҡалмай, йәш быуындың киләсәк яҙмышында хәл иткес роль уйнаусы сифатында ла сығыш яһай. Уҡыусыларының музыкаль белемен арттырыу өҫтөндә эшләгәндә уларға сәнғәт зауығы, матурлыҡ төшөнсәһе, музыка донъяһы хаҡында дөйөм мәғлүмәт, милли сәнғәт нескәлектәре тойғоһон һеңдерергә тырыша.

— Халыҡ йырҙарынан классик музыкаға күскәндә, композиторҙарҙың әҫәрҙәрен башҡарғанда бала уларҙың айырмаһын, оҡшаш өлөштәрен кесе йәштән үк тойоп, айыра белеп үҫергә тейеш. Сәхнәлә матур итеп йырларға, музыкаға тәғәйен күркәм хәрәкәт итергә өйрәтеү, баланың тауышын дөрөҫ итеп ҡуйыу, минеңсә, үҙе үк оло тормошҡа, оло сәнғәткә юл ярыу, — ти Зөлфиә Сабирйән ҡыҙы. — Ауыл балаһының тауыш тембры бик бай, ритм нескәлектәрен улар үтә тиҙ тоя, тәбиғәттәре менән бик моңло һәм бейеүгә әүәҫтәр. Шунлыҡтан улар менән ижади эшләү күңелле, һәр көн һайын ниндәйҙер уңыш яулаясағыңа ышанып, янып эшләйһең.

Зөлфиә Әбйәлилова 2001 йылда Сибай ҡалаһының «Йыл уҡытыусыһы» конкурсында ҡатнашып, 12 йүнәлештә эшләгән уҡытыусылар ярышында Гран-при яулай. Өс турҙан торған һынауҙың тәүгеһендә уға жюри алдында 6-сы мәктәптә асыҡ дәрес бирергә, педагогик концепцияһын яҡларға, тамашасы ҡатнашлығында импровизацияланған дәрес күрһәтергә тура килә. Таныш булмаған мәктәптә, тәү күргән балаларға жюриҙың һынаулы ҡарашы аҫтында асыҡ дәрес үткәргәндә уҡытыусының профессиональ мөмкинлектәре, ҡайһы бер кәмселектәре асыҡ үлсәүгә һалына. Ошо һынауҙы уңышлы сыҡҡан Зөлфиәне Өфөгә, «Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы» титулын яуларға ебәрәләр. Тәүге турҙағы асыҡ дәресте музыка белгестәре баһалай, һөҙөмтәлә бәйгелә ярышҡан 54 уҡытыусының 20-һенә генә икенсе турҙа ҡатнашыу хоҡуғы бирелә. Ун өс кешенән торған ҙур жюри ойошторған икенсе турҙа 5 уҡытыусы еңеп сыға. Ә өсөнсө тур

һөҙөмтәһендә Зөлфиә Сабирйән ҡыҙы Әбйәлиловаға «Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы» тигән бәҫле исем бирелә.

— Миңә гимназия директоры Әлфиә Ишмөхәмәт ҡыҙы Кәримова, рәссам Рафиҡ Мөхәммәт улы Шәрипов менән Елена Әҙеһәм ҡыҙы Ғәҙелшина бик ҙур ярҙам күрһәтте. Уларһыҙ был тиклем ауыр һынауҙы, бәлки, күтәрә лә алмаҫ инем. Унан, Милли музейҙа эшләүсе апайым Алһыуҙың да ярҙамы ҙур булды, — тип иҫләй Әбйәлилова.

Конкурс барышында Зөлфиә музыканы тыңлатып ҡына ҡалмай, уның тураһында фекер йөрөттөрә, бәхәс тә ҡорҙорта, ишеткән музыканы һүрәт итеп төшөрттөрә, музыкаль-дидактик уйындар ярҙамында уҡыусынан ижади эш талап итә. Балалар йырлайҙар, хәрәкәт итәләр, үҙҙәрен бәләкәй генә бер мөһим мәҙәни сарала ҡатнашыусылар итеп тоялар. Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры архивы материалдары, Милли музей коллекциялары тураһындағы аҙ билдәле мәғлүмәттәр менән байытылған, тыуған ер традициялары нигеҙендә ҡоролған дәрестәре балалар тарафынан яратып ҡабул ителә.

Бөгөн Зөлфиә Сабирйән ҡыҙы «Рәсәйҙең йыл уҡытыусыһы» конкурсында ҡатнашырға әҙерләнә, тимәк, тағы ла яңып-көйөүҙәр, үҙ-үҙеңде етмеш ҡат һынап ҡарауҙар, йоҡоһоҙ төндәр башланасаҡ. Зөлфиәнең оло һынауҙарҙы үтерлек тәбиғи һәләте, белеме, ҡулғаҡул тотоношоп берҙәм эшләрҙәй коллективы бар, шуға ла ул, тәүге сирҡаныс һынауын үткәндән һуң, үҙен күпкә тыныс тота. БДУ Сибай институтының юридик факультетын тамамлап, мәктәп, уҡытыусы һәм балаларға ҡағылышлы закондарҙы төплөрәк өйрәнмәксе. «Йәмғиәттең йөҙө уның уҡытыусыға булған ҡарашынан сығып баһалана», — тип иҫәпләй Зөлфиә һәм үҙенең профессияһына үтә лә яуаплы ҡарай, тимәк, алда уның автобиографияһы тағы ла байыраҡ буласаҡ әле.

**Кәримова Әлнисә**
**Рәхимйән ҡыҙы**

1986 йылда Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлаған. Әлнисә шиғыр яҙырға, бейергә, төрлө сараларҙың уртаһында ҡайнарға ярата. Башҡортостан Республикаһының Журналистар союзы ағзаһы. Заманында уның шиғырҙарына Мәмдүҙә Илбәкова менән Юлай Үҙәнбаевтар көй ҙә яҙҙы. Һәр байрамға уның тыуған яҡтың ауыҙ-тел ижады нигеҙендә яҙылған сценарийҙары әҙер. Әле генә «Интернатым — пар ҡанатым» исемле китабы донъя күрҙе. Әммә Әлнисә — үҙ эшенә тоғро ҡалған кеше.

«Һүҙ — телмәрҙең нигеҙ ташы, ә телмәр тулы, матур, мәғәнәле булһын өсөн уны әйтем-мәҡәлдәр, синонимдар, башҡа күп төрлө һүрәтләү саралары менән байытырға кәрәк», тип иҫәпләй уҡытыусы. Бына шул телде һөйөү, үҙендән ҡала йәш быуынды халҡыбыҙҙың бай ауыҙ-тел ижады ҡомартҡылары нигеҙендә тәрбиәләү, уның жанрҙар төрлөлөгөн, һүрәтләү саралары байлығын, телмәр төҙөлөшөн, фонетик ҡоролошон, музыкаллеген файҙаланырға өйрәтеү, быуындар бәйләнешен һүндермәү — уның тормош маҡсаты.

Әлнисә Кәримова 14 йылдан ашыу балаларҙы халыҡ педагогикаһы нигеҙендә тәрбиәләй, сөнки әхлаҡ тәрбиәһен туранан-тура халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәре, матур йолалары менән бәйләгәндә генә ниндәйҙер уңыштарға өлгәшерәнә инанып йәшәй. Һәр дәресендә ғаилә, туғандар, дуҫтар, әҙәп, кешелеклелек ҡағиҙәләре, милли рух, башҡорт характеры хаҡында һөйләшеү уҡыусыла әхлаҡи идеал формалаштыра. Башҡорт традицияһының иң бөйөк ҡиммәттәренең береһе — азатлыҡ һөйөү, илде яратыу тойғолары, халыҡ һәм батыр улдарының яҙмышы — бына ҡайҙа ул беҙҙең тамырҙар, ҡаһарманлыҡ өлгөләре, тәрбиә нигеҙҙәре. Ошо өлгөлә уҡыусыларында ҡыйыулыҡ, рухи ныҡлыҡ, белемлелек тәрбиәләргә тыры-

ша Әлнисә. «Традициялар нигеҙендә тәрбиәләү, уларҙы һаҡлау, тергеҙеү — тәрбиә эшендә иң мөһим сығанаҡ», — тип яҙған атаҡлы педагог А.С.Макаренко. Кәримова үҙ дәресендә ошо нигеҙҙә ижадсы психологияһын үҫтерергә ынтыла ла инде.

Яңы Башҡортостандың яңы граждандарын тәрбиәләү бурысы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары алдына етди талаптар ҡуйҙы. Шул айҡанлы Әлнисә Кәримова ла уҡытыуҙың йөкмәткеһен, методик алымдарын өр-яңынан ҡорҙо һәм башҡорт телен уҡытыуҙың төп йүнәлештәрен үҙенсә аныҡланы:

1. Башҡорт теле — баланың башҡорт мәҙәниәтенә, тарихына эске ҡарашын билдәләүсе асҡыс.

2. Башҡорт теле аша ғына башҡорт милли философияһын, психологик үҙенсәлектәрен үҙләштереү мөмкин.

3. Башҡорт теле — башҡортлоҡ тойғоларын, милли сифаттарҙы үҫтереү сығанағы.

4. Юғары мәҙәниәтле кешегә хас дөрөҫ һөйләү, фекерҙе анығ итеп яҙма йә телмәр рәүешендә тасуирлау тыуған тел аша ғына камиллаша.

5. Милли рухлы шәхес тыуған тел аша ғына тәрбиәләнә.

6. Башҡорт милли интеллигенцияһына, етәксе кадрҙарға алмашҡа башҡорт теле аша лайыҡлы кадрҙар әҙерләү.

Үрҙәге маҡсаттарына ярашлы ҡоролған дәрестәрендә Әлнисә Кәримова милли рухлы шәхесте тәрбиәләүҙе төп маҡсат итеп ала. Төрлө ижади алымдарға бай дәрестәре ысын мәғәнәһендә уҡытыусының ижади лабораторияһына әүерелә, өйрәнеләсәк материалға ныҡлы баҫым яһала һәм бөтә уҡыусыларының актив ҡатнашлығын талап итә. Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы мәктәптәрендә үткәрелгән асыҡ дәрестәре төҙөлөшө, темаһы менән маҡсатлы рәүештә айырылып тора: «Сәстәремдең толом сулпылары» (С.Юлаев), «Таҫтамал» (Ғ.Аллаяров), «Бер тигәс тә ни яман» (Ҡобайыр) — дәрес-йыйын, «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» (Р.Бикбаев) — дәрес-экскурсия, «Моңдар иленә сәйәхәт» (З.Исмәғилев) — дәрес-уйын һ.б. Унда белем биреү генә түгел, Башҡортостандан ситтә йәшәүсе милләттәштәребеҙҙә әҙәби материалдар аша патриотик рух, милли ғорурлыҡ тойғолары тәрбиәләү күҙ уңында тотолған.

Әлнисә Рәхимйән ҡыҙы Кәримова (Алдырханова) 1963 йылда Баймаҡ районының Моҡас ауылында тыуған. Ауылында башланғыс синыфтарҙы тамамлағас, Сибай интернат-мәктәбенә уҡырға килә. Артабан Башҡорт дәүләт университетын тамамлай.

Татарстандың Яр Саллы ҡалаһында йәшәгәнендә «Юлдаш» башҡорт ойошмаһын һәм милләттәштәре өсөн йәкшәмбе мәктәбен ойоштороуҙа актив ҡатнаша.

Тыуған яҡтарына ҡайтҡас, мәктәптән тыш, һәр байрамға, төрлө кисәләргә сценарийҙар яҙа, шиғырҙар ижад итә, республика матбуғат баҫмаларында актив сығыш яһап, Рәсәй һәм Башҡортостан журналистар союздары ағзаһы итеп алына. Ул етәкләгән «Йәнгүзәл» фольклор-хореография студияһы, «Аҡ ҡауырһын» әҙәби ижад түңәрәге уҡыусылар араһынан йәш талантарҙы әҙерләй. Әлнисә үткәргән ярышһынауҙар аҙна һайын булып тора, унда һәр ваҡыт бер йүнәлеш анығ һаҡлана — шәхес формалашыуында мөхиттең роле; йәмғиәттәге, тәбиғәттәге үҙгәрештәрҙе, яңырышты күрә белеү; ғилем-һөнәр, йәшәү рәүеше һәм мәғәнәһе хаҡында тәрән уй йөрөтөү. Башҡортостан Республикаһының лайыҡлы граждандарын тәрбиәләүгә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булараҡ үҙ өлөшөн индерергә теләп, ярһып, ярышып эшләгән, быйылғы конкурста лауреат булып ҡайтҡан Әлнисә Рәхимйән ҡыҙы Кәримоваға «Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы» тигән маҡтаулы исем бирелде.